*Миләүшә ИҘРИСОВА,*
*музыка белгесе*

# ТҮҢГӘҮЕР ЙЛЕНӘ СӘЙӘХӘТ



Ҡурайҙың тәүләп ҡасан, ҡайҙа һәм кем тарафынан яһалғанын әйтеүе ҡыйын, әммә шуныһы асыҡ: кеше, тирә-йүн мөхитте күҙәтеп, үҙенсә аңлап, билдәле бер өлгөргәнлек кимәленә баҫҡас, донъяға үҙе хаҡында белдергеһе, эсендә ҡайнаған хис-тойғолар ташҡынын тышҡы донъяға сығарғыһы килгәндер. Тәүҙә талымһыҙ ғына яңғыраған ауаз, кешенең күңеле, аң кимәле үҫә барған һайын, камиллашып, тора-бара уның эске донъяһының бар байлығын асырҙай тылсымлы асҡысҡа әүерелгәндер... Халыҡ араһынан сыҡҡан нескә зауыҡлы талант эйәләре иһә ҡурайҙы сәнғәт юғарылығына күтәргән.

Быуаттар буйына камиллаша, байый барған был хазина. Тора-бара үҙенә генә хас башҡарыу традициялары, оҫталыҡ ҡанундары, ҡурай яһау тәртибе барлыҡҡа килгән.

Ҡурайҙы ҡулға алған һайын күңелемде тулҡынланыу биләп ала. Сөнки ҡурай — уйын ҡоралы ғына түгел, ул — символ. Халҡыбыҙҙың моңға бай күңеленең көҙгөһө, үткәндәренең йылъяҙмаһы, милли менталитеттың бар байлығын, бейеклектәрен дә, кәмселектәрен дә үҙенә туплаған, ғөмүмән, башҡортто башҡорт иткән Космос ул. Был Космоста планеталар, йондоҙҙар, кескәй йондоҙсоҡтар бар.

Борон-борондан ҡурайсылар төбәге булып дан ҡаҙанған Йылайыр (элекке Матрай) районы иһә мәҙәниәтебеҙгә тотош бер йондоҙлоҡ — Дилмөхәмәтовтар йондоҙлоғон бүләк иткән. Ҡурайсылар династияһына нигеҙ һалыусы — Ишҡәле Шәмсетдин улы Дилмөхәмәтов (1901—1974) — ысын мәғәнәһендә халыҡ сәсәне, оҫта ҡурайсы, халҡыбыҙ ижады гәүһәрҙәрен килер быуындарға тапшырыу эшенә баһалап бөткөһөҙ ҙур өлөш индереүсе шәхес булараҡ оло ихтирамға лайыҡ.

Ишҡәле Дилмөхәмәтовтың көйҙәре Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үк композиторҙарҙың, музыка белгестәренең иғтибарын йәлеп иткән. 30-сы йылдарҙа композиторҙар Сәлих Сәйҙәшев һәм Солтан Ғәбәши Ишҡәле Дилмөхәмәтов йәшәгән Иҫке Яҡуп ауылына килеп, унан тиҫтәләгән йыр һәм көй яҙып алып китәләр. Музыка белгесе Лев Лебединскийҙың Хөсәйен Әхмәтов менән берлектә әҙерләгән «Башҡорт халыҡ йырҙары» (1954) һәм 1962 йылда донъя күргән «Башҡорт халыҡ йырҙары һәм көйҙәре» тип аталған ғилми хеҙмәтендә Ишҡәле Шәмсетдин улынан яҙып алып, нота ҡағыҙына төшөрөлгән көйҙәр ҙә бар.

Ишҡәле Дилмөхәмәтовтың ижады уның уландарының сәнғәтендә үҙ дауамын таба. Ишмулла ла (1928 — 1986), Сәйфулла ла (1932 йылғы) ҡурайҙы үҙҙәренең ғүмерлек яҙмышы итеп һайлаған.

Ишмулла Ишҡәле улы атаһының сәнғәтен дауам итеп кенә ҡалманы, быуаса республикала йәшәп килгән башҡарыу традицияларын органик рәүештә берләштереп, ҡурай мәҙәниәтен өр-яңы бейеклеккә күтәреүгә өлгәште. Ишмулла Дилмөхәмәтовтың сәнғәтендә боронғо халыҡ музыканттарының ижадына хас синкретизм

күренеше тергеҙелеп, профессиональ сәхнәгә күтәрелде. Ишмулла-ҡурайсы бер үк ваҡытта йырсы ла, өҙләүсе лә, сәсән дә, кәрәк икән — бейеүсе лә ине. Быларға ирекле импровизация һәләте лә ҡушылып, сәхнәлә ҡабатланмаҫ образ — ысын мәғәнәһендә халыҡ музыканты образы тыуҙы.

С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Ишмулла Дилмөхәмәтовтың ҡурайы Европа һәм Азия ҡитғаларының тиҫтәләгән илендә яңғырап, башҡорт моңон йөҙәрләгән милләт кешеләренә еткерҙе.

Данлыҡлы ҡурайсылар династияһының һоҡланғыс сәнғәте бөгөнгө көндә Ишкәле бабайҙың кесе улы — Сәйфулланың ижадында дауам итә.

Сәйфулла ағай менән тәүге танышыуым 1987 йылда булды. Дөрөҫөрәге, үҙе менән түгел, ә магнитофон таҫмаһына яҙылған көйҙәре менән таныштым. Ишкәле менән Сәйфулла Дилмөхәмәтовтарҙың ҡурайҙа уйнауы яҙылған ул таҫманы миңә мәрхүм Нигмәт Шоңҡаров ағай тапшырғайны. «Бына һеңлем, ошо көйҙәрҙе нотаға һалһаң, бик ҙур эш булыр», — тигән һүҙҙәре әле һаман ҡолағымда яңғырай. Ул саҡта Нигмәт ағайҙың үтенесе буйынса нотаға һалынған ҡырҡлаған көйҙө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор архивына илтеп тапшырҙым. Тик эш бының менән генә бөтмәне: боронғо көйҙәр, Сәйфулла ағайҙың һөйләгәндәренең тәьҫире шул тиклем көслө булғандыр, ахырыһы, йылдар үткән һайын был көйҙәргә әйләнеп ҡайтыу теләге көсәйә барып, алыҫ сәфәргә сығырға мәжбүр итмәҫ ине.

...Бына ул — Хәйбулла районының ҡола ялан уртаһында ятҡан Подольское ауылы. (Сәйфулла ағайҙың ғаиләһе менән бында күсенеп ултырыуына 25 йылдан ашыу ваҡыт үткән). Дилмөхәмәтовтарҙың йортон ҡапҡаһына матурлап төшөрөлгән таҡыя башлы ҡурай һүрәтенән танып була. Ә ҡапҡа артында гармоник бөтөнлөк, матурлыҡ ҡанундарына буйһонған ғәжәйеп донъя башлана. Люция апай менән Сәйфулла ағай, беҙҙе сығып ҡаршы алған минуттан башлап, ихласлыҡтары, ҡунаҡсыллыҡтары, үҙҙәрен ябай һәм шул уҡ ваҡытта илтифатлы тотоуҙары менән әсир иттеләр. Уларҙың етеш донъяһы, иркен ихатаһы, ҙур йорттарындағы һәр әйбер бында эшһөйәр, аҡыллы хужа менән уңған, зауыҡлы хужабикә йәшәүе хаҡында әйтеп тора.

Мыҡты кәүҙәле, ҡарсыға ҡарашлы, тыныс тәбиғәтле Сәйфулла ағай менән йылдам хәрәкәтле, тапҡыр һүҙле мөләйем Люция апай бер-береһе өсөн яратылған кеүек. Ихата эсендә йыш-йыш күҙгә салынып ҡалған сөм-ҡара күҙле малайҙар ейәндәре булып сыҡты. Люция апай йүгереп йөрөп ашһыу әҙерләгән арала Сәйфулла ағай менән атаһы, ағаһы хаҡында һөйләшеп алдыҡ. Ә умарта балы менән сәй эсеп алғас, Сәйфулла ағай ҡулына ҡурайын алды...

...Атаһының ҡурай уйнарға өйрәтеп ултырыуын хәтерләмәй ул. Әммә бала сағының иң сағыу хәтирәләре өйҙәрендә бик йыш ҡурайсылар, йырсыларҙың йыйылып, ҡурайҙа уйнап, тарих һөйләп, йырлашып ултырыуҙары менән бәйле. Бындай «концерттарҙа» яңғыраған көйҙәр бала күңелендә юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдырған. Ул ғына ла түгел, был көйҙәр уның өсөн тормош мәктәбенә әүерелә: ошо көйҙәр арҡылы ул халҡының тарихын өйрәнә, матурлыҡ ҡанундарын үҙләштерә.

«Атайыма кемдәр генә килмәй ине... Күрше Сәлим ауылынан Солтанморат сәсән Насиров йыш килер ине. Ул беҙгә туған кеше, бик күпте белә ине. Бик оло ине ул, бер 85-90 йәштәр самаһы булғандыр. Килә лә: «Ырыу көйөн уйна әле, Ишкәле», — тип «Дәлеү Ғәйшә» көйөн уйната. Уйната ла, атамды өйрәтә башлай: көйҙөң бер генә боролошо ла яңылыш булырға, еренә еткермәй уйналырға тейеш түгел. Бик талапсан остаз ине ул. Ағайым менән беҙ шым ғына тыңлап ултыра-быҙ...»

Сәйфулла ағайҙың бала саҡ, йәшлек хәтирәләре әленән-әле Иҫке Яҡупҡа ялғана. Шуға ла мин Йылайыр еренә барып әйләнергә тәҡдим иткәс, ул шатланып риза булды. Ә миңә иһә, ярты Башҡортостанды үтеп, республиканың көньяҡ сигендәге Хәйбуллаға барып етеп тә, терәлеп торған (90 саҡырым алыҫлыҡта) Иҫке Яҡупты барып күрмәү үҙе бер гонаһ булырҙай тойолдо. Шулай итеп, беҙҙең ике кешенән торған «экспедицияға» (мин һәм иптәшем Фәрит) Сәйфулла ағай, Люция апай, улдары Риф һәм ҡыҙҙары Земфира ҡушылды, һәм беҙ, Аллаға тапшырып, түңгәүер иленә юл тоттоҡ.

Хәйбулланың сикһеҙ-ҡырыйһыҙ далаларынан һуң күрше Йылайыр ер-

ҙәренә килеп инеү үҙе бер мөғжизә һымаҡ күренә: ҡылғанлы даҙалар гөлсәскәле баҡсаға алмашына. Йөҙйәшәр ҡарағаслы урмандар, ҡая ташлы тауҙар, аллы-гөллө сәскәле яландар...

Япарһаҙ ауылын үтеү менән, Һаҡмар буйлап Ҡуңыр буға юлы ята. Ҡәнифә килен үткән юл үҙе була инде!

Мин үҙемде әкиәт донъяһына ингән төҫлө тоя башлайым, артабан был тойғо бермә-бер арта. Бер аҙ барғас, ҡалҡыулыҡтан Көтөр батыр убалары күренеп ятып ҡала. Көтөр батыр — түңгәүерҙәрҙең батыры, тарихи шәхес.

Иҫке Яҡупҡа килеп етер саҡта Сәйфулла ағай, һул яҡта тороп ҡалған зыяратҡа ымлап: «Атайым шунда ята», — тине...

Ауылға аяҡ баҫыусы һәр кемде йыраҡтан уҡ ялтырап ятҡан Таштуры ҡаршылай. (Уны йыш ҡына боҙоп «Таштүрә» тип атайҙар. Дөрөҫө: Таштуры — түры таш). 100 метрҙан ашыу бейеклектәге теп-текә таш стенаны кемдер яһап ҡуйған төҫлө. Уның нигеҙен йыуып, сылтырап Һаҡмар һыуы аға. Күңелдә бер туҡтауһыҙ Ишмулланың тауышы зыңлай.

*«Таштурыға менеп бер караным,*
*Боролоп-боролоп аккан*
*Һакмарға...»*

Бында барыһы ла — Таштуры ла, Һаҡмарҙың һөҙәк ярын ҡаплаған ялтыр ҡырсынташтар ҙа, арыраҡ күренеп торған «күрәҙәсе» Шамайыл тауы ла, ауылды йәшел тун төҫлө уратып алған ҡарағас урмандары ла ҡурай моңона сорналған кеүек. Шамайыл тураһында Сәйфулла ағай бына ниҙәр һөйләне: баҡтиһәң, был тау төрлө фәжиғә йә һуғыш ғәрәсәте ҡубыр алдынан олой икән. Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан да тау кешеләрҙе шомға һалған. «Бер-бер хәл булыр, юҡҡа ғына үкермәй Шамайыл, үлемгә был», — тип һөйләнгән ҡарттар. Күп тә үтмәй, һуғыш сыҡҡан.

Ауылдан бер аҙ ситтәрәк — Ҡолонсоҡан тауы. Ҡолонло атты бүре бик оҙаҡ баҫтырған ти. Ҡаса торғас, бейә, ҡолонон эйәртеп, бейек тауға сабып барып менә лә тауҙың иң текә ҡаяһынан һикерә. Икеһе лә һәләк була. Бына шуға ла ул Ҡолоноҫҡан тауы тип атала. Йылайыр менән Һаҡмар йылғалары ҡушылған урын — был төбәктең иң гүзәл урындарының береһелер. Бер яҡ ярҙан Суҡыташ ҡаяһы суҡайып, ошо матурлыҡҡа хозурланып ултыра, ә ярҙың икенсе текәлегендә Алпамыша таштары ағарып ята. Имеш, борон заманда Алпамыша батыр, үҙенең дуҫтары менән уйнап, тирмән ташы ҙурлығындағы йоморо таштарҙы килтереп ошонда һалған. Шул ваҡыттан бирле ята бында ошо өс дәү таш һәм һис кемдең уларға көсө етерлек түгел.

Таштурыға ҡапма-ҡаршы, Һаҡмарҙың бире яғында, Ишҡәле бабайҙың йорт-ҡураһы булған. Уның урыны әле буш, яҫы нигеҙ таштары ғына ялтырап ята. Ошо тарихи ташҡа — Ишҡәле ҡурайының моңо һеңгән изге ташҡа — баҫып, Сәйфулла ағай ҡурайын һыҙҙырҙы...

Йөрәкһеп, тулҡынланып уйнаны Сәйфулла ағай. Уның моңо йәйге селләлә бушап ҡалған ауыл урамдарын тултырып, Һаҡмарҙың сылтыр тауышына ҡушылды ла, беҙҙе XX быуат башына — утыҙынсы йылдарға алып китте.

Сәйфулла Дилмөхәмәтов 1932 йылдың 24 мартында донъяға килгән. Әсәһе Фәйрүзә Ғатаулла ҡыҙының тамырҙары Әбйәлил районының Булат ауылында. Уның ата-әсәһе — Ғатаулла менән Кәримә лә йыр-бейеүгә маһир, талантлы кешеләр булған. Ғатаулла йәштән оҫта ҡурайсы булараҡ дан ҡаҙанған, Кәримә иһә бик оҫта бейеүсе, төҫкә-буйға һылыулығы менән танылған. «Оләсәйемдең ҡулынан килмәгән эш юҡ ине, — тип хәтерләй Сәйфулла ағай. — Тун, итек тегеү тиһеңме, төрлө сирҙән дауалау, ырым, ҡот ҡойоу тиһеңме... Нимә булһа ла, оләсәйемә килә торғайнылар. Оләсәйемдең ағаһы Әхмәтсафа Аҙбирганов Түбә ҡасабаһында алтын приискыһы начальнигы булған, репрессиялар заманында ниндәйҙер ғәйеп табып, ҡулға алғандар. Шунан һуң юғалған...»

Совет илендә йәшәгән меңәрләнгән ғаиләләрҙең яҙмышын емергән Сталин режимының тәгәрмәсе аҫтына Дилмөхәмәтовтар ғаиләһе лә эләгә. Ниңәлер был тәгәрмәс аҫтына, ҡағиҙә булараҡ, иң һәләтле, иң күренекле шәхестәр эләккән... Ул заманда юҡ ҡына ғәйеп тағылып күпме кешенең ғүмере өҙөлгән, нисәмә кеше нахаҡҡа «халыҡ дошманы» мөһөрөн күтәреп, тиҫтәләгән йылдар буйы Сталин лагерҙарында серегән. Ишҡәлене Ҡаҙағстан далаларына һөрәләр. Күрәһең, уның моңло ҡурайы кемгәлер ныҡ ҡамасаулағандыр...



05-2001.p65 128 27.07.01, 12:21

Алты айлыҡ Сәйфулланы апаһы Мәхүпъямалға ҡалдырып, Ишҡәле ҡатыны Фәйрүзә һәм 5 йәшлек Ишмулла менән Ҡаҙағстанға китә. Мәхүпъямал инәһе, үҙенең улы менән тиң күреп, күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтерә малайҙы. Сит ерҙә бер аҙ күнегеп, йәшәр өсөн шарттар булдырғас, дүрт йәшлек Сәйфулланы ла килеп ала атаһы. Ҡаҙағстандағы тормошто бик тоноҡ хәтерләй Сәйфулла ағай, бары тик үҙен ғаиләлә бик оҙаҡ ят бауыр итеп тойоуы, «Мине кире ҡайтарығыҙ», — тип йыш илағаны иҫендә.

Үҙен белә башлағандан бирле атай-әсәй наҙынан мәхрүм булып үҫкән сабыйға үҙ ғаиләһенә күнегеп китеү анһат булмағандыр, әлбиттә. Етмәһә, атаһы ҡырыҫыраҡ тәбиғәтле кеше — күп һөйләргә яратмай, әйттеме — закон.

Дилмөхәмәтовтарға 1939 йылда ғына тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайтырға насип була. Ас-яланғас һуғыш йылдары Ленинградты азат итеүҙә ҡатнашҡан атаһынан өс мөйөшлө фронт хаттарын көтөү, башланғыс мәктәпкә «һабаҡҡа» йөрөү мәшәҡәттәре менән үтеп китә. Бишенсе синыфты Иҫке Яҡуптан 7 саҡырым алыҫлыҡтағы Ҡыпсаҡ ауылына йөрөп тамамлай Сәйфулла. Артабанғы «университеттары» Йылайыр урман хужалығында дауам итә. Өс йыл шунда ағас ҡырҡа 14 йәшлек үҫмер. Яҙмышы тағы ла ҡырҡа боролош яһай: үҙалды тормошҡа аяҡ баҫа егет. Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа ҡулына балта, көрәк тоторҙай һәр кем хеҙмәт юлына баҫырға тейеш булған. Әле лә яҡшы хәтерләй Сәйфулла ағай: уларҙың бригадаһына йыуан-йыуан ҡарағайҙарҙы киҫеп, әрсеп, Ҡана йылғаһынан һал итеп ағыҙыр өсөн әҙерләү эше йөкмәтелгән. Бригадала уның йәшендәге ун-ун бишләп малай. Ағастар йыуан, көс еткеһеҙ ауыр... Эш көнө иртәнге сәғәт 7-нән киске 11-гә тиклем дауам итә, шунан 10 саҡырым алыҫлыҡтағы бараҡтарға йоҡларға ҡайталар. Барак эсендә оҙон урындыҡ һалынған, мейес юҡ, сыуалға сей утын яғыла. Көрт кисеп, еүешләнгән кейем төн үткәнсе кибеп тә өлгөрмәй; ҡырҡлаған кеше теҙелешеп ятып йоҡлағанда әйләнеп тә ятып булмай — тығыҙ...

1951 йылда Сәйфулла Дилмөхәмәтов Совет Армияһына хеҙмәткә алына. Алыҫ Көнсығышта, Корея сигендә хәрби флотта дүрт йыл хеҙмәт итә ул. Үҙе бер ғүмер... Был осор уның өсөн — сынығыу, һынау осоро була. Әлбиттә, күңелендә ҡурай моңо, һәр ваҡыт үҙенә тартып торған Һаҡмары, тыуған яҡтары булмаһа, моғайын, егеткә бик ауырға тура килер ине. Нисек кенә булмаһын, әрме срогын тултырып, Башҡортостанға ҡайта егет. Өфөгә килеп еткәс, бер танышы: Шишмә районы үҙәгендә монтажсы-электриктар әҙерләүсе курс асалар, шундуҡ стипендия түләйҙәр икән, тигән хәбәр һала һәм бергәләп шунда барырға өгөтләй. Бына шулай, монтажсы-электрик һөнәрен үҙләштереп, Сәйфулла Куйбышев тимер юлында эшләй башлай. Бер ваҡыт Благовар районына электр линиялары үткәрергә ебәрәләр егеттәрҙе. Быҙаулыҡ тип аталған ауылда эшләп йөрөгәндә дуҫы Люция исемле зәңгәр күҙле ҡыҙыҡай менән таныштыра уны... Был хәлдәргә инде ярты быуатҡа яҡын ваҡыт үткән. Люция апай әле лә төҫ ташламаған, ун бала — биш малай һәм биш ҡыҙ әсәһе булыуына ҡарамаҫтан, ҡыҙҙарса еңел кәүҙәле, сос, аяҡ аҫтында ут сәсрәтеп йөрөүсе һөйкөмлө ҡатын.

1958 йылда ғаиләһе менән тыуған яғына әйләнеп ҡайта Сәйфулла Дилмөхәмәтов. Үҙе бының сәбәбен ябай аңлата: «Атай саҡырып ҡайтарҙы». Юлдыбайҙағы профессиональ-техник училищела уҡып, комбайн штурвалы артына ултыра.

1968 йылда Сибайҙа һуғыштан һуң тәүге тапҡыр республика халыҡ ижады смотры үткәрелә. «Ғилмияза» һәм «Байыҡ»ты уйнай Сәйфулла. Бығаса үҙенең һәләтенә бигүк ышанмаған егеткә ошо смотрҙа ҡатнашыу, беренсе урынды алыу ижадына этәргес була, күңеленә ҡанат ҡуя. Был еңеүҙән һуң С.Дилмөхәмәтов төрлө концерт, осрашыу, фестивалдәрҙә йыш сығыш яһай башлай. Атаһынан отоп алған көйҙәрҙе айырыуса яратып башҡара.

«Атайым һис сәхнәнән төшмәне, — тип хәтерләй Сәйфулла ағай. — Әле һуғышҡа тиклем үк Мәскәүҙә халыҡ ижады олимпиадаһында ҡатнашты, уны Өфөгә филармонияға ла эшкә саҡырҙылар; бер нисә ай филармония бригадалары менән сығыш яһап, республика райондарында гастролдә йөрөнө. Беҙҙе лә алып, бөтөнләйгә Өфөгә китергә торғанда, һуғыш сыҡты. Фронтта ҡурайынан һис айырылмаған, ҡурай уйнап һалдаттарҙы дәртләндергән. Яу яланынан ҡайтҡас, уң ҡулы яраланып, ҡоро һөйәккә

ҡалһа ла, уйнауын ташламаны. Ҡулы бөгөлмәй, ә бармаҡтарына иһә күҙ эйәрмәй. Нисек уйнағандыр...Уны бик йыш Өфөгә төрлө ҙур-ҙур концерттарҙа ҡатнашырға саҡырып торҙолар»...

1955 йылдың 4 июнендә Мәскәүҙең Съездар Һарайының Колонналы залында яһаған сығышы хаҡында бәйән иткән документ әле Сәйфулла ағайҙың ғаилә архивында һаҡлана. Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре барышында күрһәтелгән концерттарҙың береһе була был. Ваҡыт үтеүҙән һарғайған был йоҡа ғына программа биттәрендә ул заманда кешеләрҙе биләгән эмоциональ күтәренкелек, байрам тойғоһо әле булһа һаҡланалыр кеүек... Программала әйтелеүенсә, Ишҡәле Дилмөхәмәтов был концертта «Ғилмияза» һәм «Аллаяр батыр» көйҙәрен уйнаған.

Әле мәктәптең башланғыс синыфтарында уҡығанда уҡ ҡурайҙа әкренләп уйнай башлаған Сәйфулланың тора-бара ҡурайға ныҡыраҡ тартылыуы һис ғәжәп түгел. Бала сағынан ҡурай моңо күңеленә һеңгән уның. Тыуған яғына ҡайтыу был ынтылышты тағы ла көсәйтеп, йөрәк түренән урғылырға торған моң шишмәһенә юл ярғандыр. Бына шулай, кемдер яҙмышын сит яҡтарҙа эҙләй, ә кемдер үҙ булмышын, тәбиғи асылын тыуған тупраҡта таба. Сәйфулла ағай өсөн ҡурай — ул һөнәр ҙә, яратҡан шөғөл дә, күңел талабы ла.

«Сибайҙағы тәүге уңышымдан һуң атайым миңә: «Хәҙер инде олоғайҙым, концерт-фәләнгә йөрөмәм, һин йөрөрһөң», — тине. Атай мәрхүм ауыҙынан сыҡҡан был һүҙҙәр оло маҡтау һүҙе булып ишетелде...»

Был Ишҡәле ҡарттың улын ысын ҡурайсы итеп ҡабул итеүе, уға фатиха биреүе булғандыр, күрәһең. Ә сығыштар йышая бара, башта район күләмендә, унан Өфөлә, Мәскәүҙә, сит республикаларҙа.

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сәйфулла Дилмөхәмәтов 70-кә етеп бара. Ошо дәүерҙә күпме сығыш яһаған, нисәмә конкурс-фестивалдә ҡатнашып, абруй ҡаҙанған. Бөгөнгө көндә Сәйфулла Ишҡәле улы Дилмөхәмәтов республикабыҙҙың арҙаҡлы халыҡ музыканттарының береһе. Башҡорт ҡурайын тәүләп Европаға таныҡҡан данлыҡлы Йомабай Иҫәнбаев, атаһы Ишҡәле Дилмөхәмәтов, Һибәтулла Ҡотошов, Солтанморат Насировтар кеүек, түңгәүер ырыуының рухи хазинаһынан йәшәү дәрте алып һәм ошо байлыҡты түкмәй-сәсмәй һаҡлап, үҫтереп, кешеләргә еткерергә тырыша Сәйфулла ағай. Бына егерме йылдан ашыу ул ҡурай серҙәрен мәктәп балаларына өйрәтә. Тәүҙә Подольск ауылында бәләкәй генә түңәрәк ойоштора. Әлеге көндә ул Аҡъяр музыка мәктәбенең филиалын етәкләй. Малайҙар ҡурай класына йөрөһә, ҡыҙҙар ҡубыҙҙа уйнарға өйрәнә. Сәйфулла ағайҙың ғорурланырлыҡ уҡыусылары ла бар. Аҡъяр музыка мәктәбе уҡытыусыһы Венер Салауатов, Маҡанда эшләп йөрөүсе Ришат Аҡбалиндар, мәҫәлән, төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, бер нисә тапҡыр призлы урындар яуланы. Бөгөнгө көндә улар белем-тәжрибәләрен уҡыусы балалар менән уртаҡлаша. Уҡытыу эшен Сәйфулла ағай үҙенә хас егәрлелек менән, бар күңелен һалып, ихлас башҡара. Әйткәндәй, ихласлыҡ, киң күңелдәлек — уның булмышының төп һыҙаты. Сәйфулла ағай менән аралашҡанда уның ябайлығы һәм ауыл халҡына хас булған эскерһеҙлеге, тормошҡа, бөтә донъяға яҡты ҡарашы һоҡландыра. Ул бөтә күңеле менән һөнәренә бирелгән һәм ҡурайға булған һөйөүен уҡыусыларына, тамашасыһына күндереүҙе үҙенең бурысы итеп һанай. «Минең класта башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, сыуаш, хатта рус балалары ла бар. Береһен дә кире бороп сығармайым, йөрөһөндәр, өйрәнһендәр. Ун-ун биш бала араһынан бер ҡурайсы сыҡһа — бик яҡшы. Ҡалғандары ҡурайҙың нимә икәнен белеп, төшөнөп үҫәләр. Был бик кәрәкле. Ҡурайҙың бөтөнләй юғалыу ҡурҡынысы янаған замандар ҙа булды. Әле балаларҙың ҡыҙыҡһынып, ҙур теләк менән дәрескә йөрөүҙәренә мин бик ҡыуанам», — ти ул.

Сәйфулла ағай нота грамотаһын белмәй, педагог дипломы ла юҡ. Остазлыҡ һәләте уға тәбиғәт тарафынан бирелгән, күрәһең. Ҡайһы берәүҙәр икешәр диплом алып үҙләштергән педагогик алымдарҙы ул интуиция, уйланыуҙары, бай тормош тәжрибәһенән ала. Төп педагогик алымы: ябайҙан — ҡатмарлыға. Нота грамотаһының юҡлығы ла Сәйфулла ағайҙы бер ҙә аптыратмай, сөнки ул балаларға көйҙәрҙе үҙ системаһы ярҙамында өйрәтә. Мәҫәлән, ҡурайҙа яңғыраған өс октаваны Сәйфулла ағай рим һандары менән билдәләй:



05-2001.p65 130 27.07.01, 12:21

I — иң түбән яңғырашлы
октава
II — уртансы
III — иң юғары
Ауаздарҙың оҙонлоғо:
оҙон ауаз — оҙон һыҙыҡ —
уртаса — нөктәле һыҙыҡ •—
ҡыҫҡа өн — нөктә •

Өндәрҙең юғарылығын күрһәтер өсөн ҡурайҙың тишектәре ғәрәпсә һандар менән билдәләнә.

«Ошо система буйынса, 2-3 өндән торған ябай ғына көйҙө таҡтаға яҙып өйрәтәм. Балалар бик тиҙ уйнарға өйрәнә һәм беренсе синыфта уҡ 40-50 еңел көй өйрәнә. Шулай уҡ ябай ғына төҙөлгән күнекмәләр ошо көйҙәрҙе башҡарырға ярҙам итә. Күнегеүҙәрҙе ҡабат-ҡабат уйнатам, сөнки улар бармаҡтарҙы эшләтә. Шул уҡ ваҡытта дөрөҫ тын алырға ла өйрәтергә кәрәк. Артабан ҡатмарлыраҡ көйҙәргә тотонабыҙ, ә 5-се синыф уҡыусылары инде оҙон көйҙәр бейеклегенә үҫеп өлгөрә...»

Талантлы кеше бөтә яҡлап талантлы була, тиҙәр. Сәйфулла ағай хаҡында һөйләгәндә ул эшләгән ҡурайҙар хаҡында әйтмәйенсә мөмкин түгел. Ҡурай оҫтаһы булып танылыуына ла байтаҡ ғүмер үткән. Быға уҡытыусы эше этәргес булды: балаларға уйнарға өйрәнер өсөн ҡурайҙар кәрәк бит.

Ҡурайҙарын, Вәкил Шөғәйепов ысулы буйынса, ағас шпондан яһай Сәйфулла ағай. Уның маҡсаты — боронғо түңгәүер башҡорттары яһаған ҡурайҙы тергеҙеү. «Борон түңгәүерҙәр 12-шәр тотам оҙонлоҡтағы йыуан ҡурайҙарҙа уйнаған. Ундай ҡурайҙың тауышы түбән һәм уртаса, яңғыраулыҡлы, көр була. Атайым да, ағайым да шундай ҡурайҙа уйнай торғайнылар. Атайым, ҡурай һыбыҙғы кеүек нәҙек тауышлы, һыҙғыртҡыс кеүек сыйылдаҡ булырға тейеш түгел, ти торғайны. Бына ул — түңгәүер ҡурайы» , — тип, Сәйфулла ағай беҙгә бер ҡурайын бүләк итте.

Сәйфулла ағай быларҙы үҙенең оҫтаханаһында һөйләй. Стеналарға махсус элмәктәргә төрлө оҙонлоҡтағы ҡурайҙар эленгән; шпонды эшкәртеү, тигеҙләп киҫеү, тейешенсә тишектәр яһау өсөн ҡорамалдар, йәбештереү, матурлап лаклау өсөн махсус елем, лак һауыттары теҙелгән кәштәләр... «Бер ҡурай эшләү өсөн бер нисә көн мәшәҡәтләнәһең; эшләгәс, тейешле камиләнә еткәнсе киптерәһең. Ярай әле, ярҙамсыларым күп. Район хакимиәтенә ниндәй һорау менән барһам да, аңлап, ярҙам итергә тырышып торалар. Айырыуса хакимиәт башлығы Фәтих Ҡаҙаҡбаевҡа рәхмәтем ҙур. Бик ихтирамлы, яҡшы күңелле кеше». Сәйфулла ағайға эшһеҙ ултырырға тура килмәй: ҡурайға заказдар байтаҡ. Күбеһенсә мәктәптәр, мәҙәниәт һарайҙары күмәртәләп ала ҡурайҙарҙы. Һуңғы йылдарҙа Сәйфулла ағайҙың ҡурайҙарын Республика халыҡ ижадының ғилми-методик үҙәге лә күпләп ала.

«Ишмулла ағайым ҡурай яһай башлаһа, донъяһын онота торғайны. Эшләй-эшләй ҙә, уйнап ҡарай. Уның ҡурайы ла оҙон, йыуан була торғайны, ҡайһы бер ҡурайсыларҙың буйы етмәй ине. Ә ағас ҡурайҙы ул өнәп еткермәне. Шуныһы үкенесле, минең ҡурайҙарымды күрмәне. Уйнар инеме, әллә яратмаҫ ине микән? Белмәйем...»

Ағаһын иҫләгәндә Сәйфулла ағайҙың күҙҙәренән йылылыҡ бөркөлә. Был ҡараште мин туғанлыҡ тойғоһон ғына түгел, ә рухи яҡынлыҡ һәм тәрән ихтирам билдәһен күрҙем. Ҡустыһының фиҙакәр хеҙмәте, емешле ижады, һис шикһеҙ, Ишмулланы битараф ҡалдырмаҫ ине.

...Иҫке Яҡупҡа килеп ингәс тә беҙ Сәйфулла ағайҙың ике туған апаһы Мәфтуха Әхмәтсафа ҡыҙы Исламғолова инәйҙең йортона һуғылғайныҡ. Беҙҙең бәләкәй генә «экскурсия» тамамланыуға Мәфтуха инәй йәйге аласыҡта табын әҙерләп көтөп торған. Ҡабарып бешкән икмәк, үлән еҫе аңҡыған ҡаймаҡ, хуш еҫле бал менән сәй эсеп алғас, Хәйбуллаға ҡайтырға әҙерләндек....

Юлда ҡарағаслы урмандар, борон-борондан ҡурай моңо һеңгән ҡая-ташлы тауҙар менән хушлашып, мин был ерҙәрҙең йыр-көйгә, таланттарға бай булыуына һис тә ғәжәпләнерлек урын юҡлығын аңланым. Бында бит һәр ауыл, һәр йылға, һәр тау, һәр таш тарих һөйләй, көй көйләй. Ошо тере хазинаны күрә-ишетә генә бел.

...Сәйфулла ағайҙарҙың ихатаһына көн кислагәс кенә ҡайтып керҙек тә, тағы ла йыр-көй донъяһына сумдыҡ. Сәйфулла ағай ашыҡмай ғына хәтер ебен һүтә, ҡулына ҡурайын алып уйнап та ебәрә. Әңгәмәбеҙҙең төп темаһы — халҡыбыҙ көйҙәре. Ҡурайсы атаһынан, Йомабай Иҫәнбаевтан отоп алған көйҙәрҙе уйнай, уларҙың күбеһенең тарихтарын һөйләй: «Беҙҙең яҡта сыҡҡан көйҙәрҙең күбеһе — марштар, оҙон көйҙәр һирәгерәк ос-



05-2001.p65 131 27.07.01, 12:21

рай. Беҙҙең түңгәүерҙәр ырыуы элек-электән бик һуғышсан булған, хәрби походтарҙа йыш ҡатнашҡан. Бына шул походтарҙа сыҡҡан ул марштар — «Хәйбулла маршы», «Аллаяр батыр», «Көтөр батыр» һәм башҡалар. Ҡайһы ваҡыт концерттарҙа миңә шундай һорау бирәләр: «Ни эшләп был көйҙәр марш тип атала, улар атлауға килешмәй бит?» — тиҙәр. Мин былай тип яуап бирәм: «Борон башҡорт яугирҙары йәйәүләп түгел, һыбай йөрөгән. Был марштар ат юрғалауына яраҡлаштырып сығарылған, сөнки яугирҙың бар ғүмере ат өҫтөндә үткәс, ҡурайын да оҙон-оҙон юлдарҙа эйәр өҫтөндә тартҡандыр».

Сәйфулла ағай атаһынан отоп алған «Аҡ яурын сал бөркөт», «Суртан үҙәк», «Саптар юрға», «Мамыт», «Дәлеү Ғәйшә», «Турат сағылы» көйҙәренең тарихтарын һөйләгәндә уның сәсәнлек маһирлығына тағы ла һоҡланып ҡуйҙым.

Уйнағанда ул йыш ҡына: «Бына атайым, Йомабай Иҫәнбаевтар уйнай ине! Уларҙа ине моң!» — тип, ихлас һоҡланыу менән бер нисә тапҡыр әйтеп ҡуйҙы. Хәҙерге ҡурайсыларҙы ла ул тик маҡтап телгә ала, айырыуса Азат Айытҡолов, Юлай Ғәйнетдинов, Роберт Юлдашевтарҙың оҫталығын юғары баһалай. Ғөмүмән, Сәйфулла ағай менән һөйләшкәндә уның сабырлығына һәм балаларса ихласлығына хайран ҡалаһың. Бөгөнгө буталсыҡ заманда ла шундай күңел сафлығын һаҡлап ҡалыу көслө рухлы кешенең генә хәленән киләлер. Ә рух бейеклеген уға бына ошо — заманалар үҙгәреп тә, ҡиммәтен һис юғалтмаясаҡ хазина — халҡыбыҙ ижады, атаһынан, ағаһынан аманат булып ҡалған ҡурай бирәлер.

Ҡурай — тәбиғәт тауышы. Ә тәбиғәт ялғанлыҡты үҙһенмәй. Сәйфулла ағай һөйләгән бер ваҡиға быны тағы бер раҫлай.

...Башҡортостандан бер төркөм артистар Ҡазандың «Таҫма» фабрикаһында сығыш яһай. Залдың йәшеллеккә күмелгән бер мөйөшөндәге ситлектә ике һандуғас ултырған булып сыға. Һандуғасмы, башҡа ҡошмо — уныһы мөһим түгел. Әммә, Сәйфулла ағай «Һандуғас»ты уйнап ебәреүе була — теге ҡоштар, талпынып-талпынып, һайрай башлай. Был хәлгә ғәжәпләнгән залдағы халыҡ, тып-тын ҡалып, бер ситлеккә, бер ҡурайсыға ҡарай. Ҡурайсы уйнап бөтһә — ҡоштар ҙа тыма. Тыңлаусылар Сәйфулла ағайҙы алҡышҡа күмә, сәхнәнән ебәрмәйҙәр; тағы уйнай ҡурайсы, уға ҡоштар ҡушыла. Был ҡоштар шулай өйрәнгәндер, тип уйлай Сәйфулла ағай. Әммә, сираттағы номер — бер йырсы ханым менән баянсы сығыштарын башлау менән, ҡоштар баштарын ҡанат аҫтына йәшерә лә ситлектең иң арғы мөйөшөнә боҫа. Артабанғы эстрада номерҙары барышында ла һайрамай улар. Хатта баштарын да ҡалҡытмайҙар. Концерт тамамланыуға яҡынлашып, Сәйфулла ағай тағы ла уйнай башлағас, теге ҡоштар йәнә кемуҙарҙан һайрашырға тотона... Бына шулай һандуғастарҙы һайратырлыҡ дәрт-моң бар ҡурайҙа.

Дилмөхәмәтовтарҙың ишле ғаиләһенән беҙҙә оҙатырға тип ҡапҡа төбөнә Люциә апай менән Сәйфулла ағай, уларҙың Сибайҙа уҡып йөрөгән ҡыҙҙары Земфира һәм Подольскиҙа донъя көткән улдары Риф, Аҡъярҙан ҡунаҡҡа килгән ҡыҙҙары Рәйсә һәм ейән-ейәнсәрҙәре сыҡты.

Дилмөхәмәтовтар менән һаубуллашып, Сәйфулла ағайҙың көйҙәре яҙылған кассеталарҙы тыңлай-тыңлай, оло юлға сығабыҙ.

Хуш, түңгәүер ере!





05-2001.p65 132 27.07.01, 12:21